5 класс.

Контроль диктант

Минең йортом

Беҙҙең ауыл урман араһында урынлашҡан. Беҙҙең атайҙарыбыҙ һәм ағайҙарыбыҙ урман хужалығында эшләйҙәр. Уҡыусылар урманды һаҡлауҙа әүҙем ҡатнашалар. Ҡырҡылған урман урынына ҡарағай, шыршы ағастары ултыртабыҙ. Урманды ҡороған ботаҡтарҙан һәм япраҡтарҙан таҙартабыҙ. Көҙ көнө ағас орлоҡтары йыябыҙ. Орлоҡтарҙы посылка менән мәктәптәргә ебәрәбеҙ. Был эштәребеҙ өсөн беҙгә урман хужалығы эшселәре рәхмәт әйтәләр, бүләктәр бирәләр.

Контроль күсереп яҙыу

Көҙ

Сентябрь, октябрь, ноябрь – к…ҙ айҙары. К…ҙ көнд...р ҡыҫҡара, т…ндәр оҙая. Ҡ…йын, й…кә, сағ…н аҡ…стары …праҡтарын ҡоялар. Тәүлекләп, аҙналап ям…ырҙар яуа. Һалҡ…н елдәр иҫә. Ҡо…тар йылы яҡтарға китәләр. Беҙҙә ҡы…лаусы ҡоштар ғына ҡала. Ҡуя…дар, тейендәр һәм башҡа й…нлектәр йөндәрен алыштыралар. Баҫ…уҙарҙа уңыш йыйыу тамамлана. К…ҙ аҙағында төньяҡтан беҙгә ҡыҙылтүштәр осоп киләләр.

Контроль диктант

Шыршы турғайҙары

Һеҙҙең ҡыш көнө урманда булғанығыҙ бармы? Йәмле лә һуң ҡышҡы урман! Айырыуса шыршы һәм ҡарағайҙар күркәм булалар. Уларҙың ботаҡтарында матур булып ҡар ята. Бейек шыршыларҙың ботаҡтарында оялар күргәнегеҙ бармы? Унда шыршы турғайҙары оя яһайҙар. Улар сатлама һыуыҡтарҙа ла геү килеп уйнайҙар. Шыршы турғайҙары шыршы тубырсыҡтарының орлоғон ашайҙар. Улар ҡыш көнө бала сығаралар. (54 һүҙ.)

Контроль диктант

Джинсы

Джинсы – кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән тығыҙ салбар. Уны Леви уйлап табып, эш кейеме итеп 1853 йылда беренсе тапҡыр донъяға сығарған. Тарихсыларҙың мәғлүмәттәре буйынса, тағы ла итальян матростары ҡаты киндер салбар кейгән. Ул елкән тегеү өсөн елкәнле флот туҡымаһы булған.

“Ыштан булһа, шундай булһын” - тип әйткән Дженес. Генуя ҡалаһында итальян һүҙенән килеп сыҡҡан был исем. Унда елкән тегеү өсөн туҡыма етештергәндәр.

Ә хәҙер джинсы бөтә төр халыҡтың төп һәм модалы кейеменә әүерелде.